*›амса МОРТАЗИН,*
*Силүбе дүµлүт университетыныS ілкүн уњытыусыєы*

# АРҘАҠЛЫ ЗАМАНДАШ



*Силәбе калаһының 100-сө һанлы Индустриаль педагогия колледжы профессиональ белем бирeу укыу йорттары араһында иң якшылар рәтендә. Силәбенең Металлургтар район гәзите лә был укыу йортон өсөнсө мең йыллык кадрҙарын әҙерләүсе тип хаклы билдәләп үтте. Колледждың һәр йәһәттән дә юғары уңыштарға өлгәшеүе уның үҙ эшенә мөкиббән директоры Рауил Хәлил улы Асатуллиндың хеҙмәте.*

*Р.Х. Асатуллин — педагогия фәндәре кандидаты, Профессиональ-техник белем биреү академияһының мөхбир ағзаһы, Рәсәй профессиональ-техник белем биреүҙең атҡаҙанған уҡытыусыһы.*

Халыҡта шундай бер хикмәт йөшәй: «Бер аҡыл эйәһенән: «Әгәр ҙә һиңә иртәгә үләһең, тип әйтһәләр нимә эшләр инең: туйғансы ашар, әллә туйғансы йоҡлар инеңме?» — тип һорағандар. «Юҡ, — тигән ул. — Мин туйғансы һөйләшер инем». Был хикмәттәге аҡыл эйәһенең асылы: сафсата һатыу түгел, ә үҙендең файҙалы һәм фәһемле кәңәштәрең, тормош тәжрибәң менән уртаҡлашыу. Бөтә мәғәнә шунда: аралашҡан кешеңдән нимә алаһың бит.

Рауил Хәлил улын күптән беләм һәм уны ошо хикмәттәге аҡыл эйәһе менән сағыштырырға, уға оҡшатырға баҙнат итәм. Тормошта ситтән ҡарауға бик тыныс һәм сабыр кеше булып күренһә лә, эстән ул үҙен уратып алғандарҙы ҡайғыртып һәм донъя тиеп ҡайнап йәшәгән етди шәхес. Елдәй елләнеп бармаҫ изгелекле кеше.

Тормошта һәр бер кеше әкренләп асыла барған китап, уны аңлау һәм белеү өсөн ғүмер буйы аралашырға кәрәк, тиҙәр. Рауил Хәлил улының тағы ла мин күрмәгән әллә күпме асыл сифаттары барлығына ышанам. Ул уйламайынса башҡаға бәрелмәҫ, хәйләле яман эш итеү уға бөтөнләй ят. Тормоштағы уңыштары уның хәләл хеҙмәт емеше.

Асатуллин Рауил Хәлил улы (1963 йылдың 25 июнендә Силәбе өлкәһенең Ҡыштым ҡалаһында тыуған). Мәктәпте тамамлағас, һөнәрселек училищеһында белем ала. Свердловскиҙағы индустриаль-педагогия техникумын, Мәскәү нефть институтын, Силәбе агроинженерҙар университетын тамамлай.

Рауил Хәлил улы төҫ-башы менән Арғаяш башҡорттарына бик оҡшаш. Бигерәк тә Ҡолой ауылы халҡының һыҙаттары күренгәндәй, — унда туғандары булыуын таныны. Төп сығыштары Арғаяш районынан: атаһы Хәлил ағай Мөхәммәт ауылынан булһа, әсәһе Шәмсижиһән апай — Байрамғол ауылы ҡыҙы. Оло юлға сығарыусы һәм шәхес итеп тәрбиәләүсе ата-әсәләрен оло ихтирам менән телгә ала ул.

Тыуған яҡ, нәҫел-нәсәп хаҡында һүҙ сыҡҡас, Рауил Хәлил улы күскеләп йөрөүҙәрен һәм дәүләт эше күп булыуын билдәләп үтте. Тауышында зарланыу тойғолары сағылмаһа ла, бөгөнгө башҡорт ауылдарының яҙмыштары өсөн һыҙланыу бар унда. Эшһеҙлектән эскегә һабышып тормош төпкөлөнә



10-2001.p65 82 02.11.01, 15:12

тәғәрәгән ауылдар яҙмыштары өсөн әсенеп: «Беҙгә бөгөн тик маҡтанып ҡына йәшәргә ярамай, ә әсе тормош ысынбарлығы хаҡында асыҡтан-асыҡ һөйләшеп, тейешле саралар күрергә кәрәк», — тине ул. Унын был һүҙ-ҙәрендә замандаштарына, милләттәш-тәренә битараф булмауы кеүек борсоу-лы уйҙары сағыла.

Ил хәстәре менән йәшәгән етәксе — донъя тотҡаһы. Рауил Хәлил улы үҙ иңенә ятҡан донъя йөгөн мәҙәниәтле кеше булараҡ лайыҡлы башҡара, өлгөлө етәксе. Кеше факторына булған унын оло яуаплылығы үҙен генә түгел, ә уны уратып алғандарҙы ла айырым бер юғарыраҡ тормош баҫҡыстарына күтәрергә мөмкинселек бирҙе. 100-сө һанлы колледж тормошо хаҡында әллә күпме маҡтаулы хәлдәрҙе яҙырға мөмкин. Был хаҡта студенттар үҙҙәре лә: «Беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ һоҡлан-ғыс!» — тип әйтәләр икән, шулар һүҙемә ҡеүәт түгелме ни?!

Рауил Хәлил улы һәр йәһәттән дә өлгө булырҙай шәхес. Ул филолог булмаһа ла ҡаҙаҡ, төрөк, ғәрәп, немец телдәрен үҙләштергән. Шулай ҙа үҙенең эскән ҡойоһона төкөрөп ҡараусыларҙан түгел, мәктәптә туған тел уҡымаһа ла башҡортса иркен аралаша. Етәкселек, директорлыҡ эштәре менән генә сикләнеп ҡалмаған, ә фәнни йәһәттән дә даими үсеш өҫтөндә. Йәмғиәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнашырға ваҡыт таба, милли проблемаларға битараф түгел. Силәбе ҡалаһының татар-башҡорт мәҙәниәте үҙәге эштәрендә ҡатнаша, Силәбе баш-ҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы ла.

Унын менән әңгәмәләшкәндә бөгөн бик күптәрҙе борсоған мәсьәләләргә ҡағылышлы былай тип һөйләне: «Мин яңыраҡ Арғаяш районында аҡһаҡал-дар ҡоро барлыҡҡа килеүен ишеттем. Ә бит Үзбәкстанда мәхәллә ҡоро электән бар һәм ул бик мөһим йәмғиәт функцияһын башҡара. Бөгөн беҙҙә ошондай милләтте упҡындан ҡотҡа-рыусы рухи стержень етмәй. Тәрлө эштәрҙә эшләйбеҙ һәм үҙ эшебеҙҙе һәйбәт башҡарһаҡ шул еткән кеүек. Ә эшсенең ҡалған донъяһы, унын эштән һуң ни менән шөғөлләнеүен етәкселәр белмәй ҙә. Әхлаҡи тәрбиә тураһында ҡайғыртыуҙар бөттө, ул бөгөн бик түбән төштө. Шуға ла мин тарихсыла-рыбыҙға «Башҡорттарҙын йәмғиәт ҡоролошо» тигән тема өҫтөндә эшләп быныҡ буйынса Силәбе өлкәһендә кон-ференциялар уҙғарыуҙы тәҡдим итер инем».

Колледждың ҡалала иң яҡшылар иҫәбендә булыуы унын уҡытыусыла-рын һәр йәһәттән дә әүҙемләштереү менән бәйлелер. Күп тауышлы ошон-дай типтағы уҡыу йорттары араһын-да индустриаль-педагогия колледжы-ның көслө һәм сағыу яңғыраған үҙ тауышы бар. Унда студенттарға һәр йәһәттән дә үсешеүгә бөтә мөмкинсе-лектәр ҙә булдырылған. Спорт буйын-са ҡалала лидерлыҡты һаҡлайҙар, сәнғәт буйынса ла бил бирерлектәрҙән түгелдәр — бына тигән «Колледж» ти-гән театр-студия эшләй. Белем алыу һәм рухи донъя, уҡыу һәм спорт бергә тора. «Колледж» театр-студияһы өлкә фестивалдәрендә беренселекте һаҡ-лай. Яңыраҡ уҙған Бөтә Рәсәй «Тыл-сымлы экиәт донъяһы» театр бәйге-һендә беренсе урын яулауҙары шуға асыҡ дәлил.

«Умырзая» татар-башҡорт вокал төркөмө уңышлы эшләп килә. Силәбе-ләге танылған ҡурайсы Радик Заһиров етәкселегендә ҡурайсылар һәм ҡумыҙ-сылар төркөмө өлкә конкурстарында ғына түгел, Башҡортостанда уҙғарыл-ған бәйгеләрҙә лә даими ҡатнаша. Яңыраҡ ҡына татар-башҡорт хорео-графия ансамбле ойошторолған.

Әлектән үҙемде гел уйландырған «Нимә беренсел: тәрбиәме, әллә белем-ме?» тигән һорауымды был юлы Рау-ил Хәлил улына ла бирҙем. Ул минең һорауыма ошондай яуап ҡайтарҙы: «Минеңсә, беренсе урында тәрбиә то-ра. Сөнки тәрбиә — ул алтын балыҡ-ты ҡаптырыусы ҡармаҡ. Ә белем тәрбиә булғанда төрлө тормош шарт-тарында ла үҙләштерелә, уға өлгәшелә. Белем ул ошо балыҡтың ауыҙын асыу-сы», — тине үҙенсә образлы сағыштыр-ыуҙар аша. Был яуапта, миңә ҡалһа, педагог-етәксенең тормош принцип-тары, фәлсәфәһе лә сағыш тапҡан ул.

Бар табышын үҙ файҙаһына ғына ҡайырмай, ә үҙенең уҡыусылары һәм педагогик коллективы менән бүлешеп йәшәй. Арттан килеп алдан алыу психологияһы уға бөтөнләй ят нәмә. Ул халҡының рухи һәм ихтыяр көсөн үҙендә туплаған киң күңелле, төплө фекерле һәм башҡалар хаҡында хәстәрлекле, заманса фекерләгән, һәр саҡ гуманистик принциптарға тоғро ҡалған гәҙел етәксе.